Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы
Дәүләт бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

«Ҡаралған»
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусыларының МБ ултырышында
«29» август 2023 йыл
------------ Р.М.Тимербулатова

«Килешелгән»
Уҡыу-уҡытыу буйынса
директор урынбаҫары
« 29 » август 2023 йыл
-------------- Л. Х. Шөғәйепова

«Раҫлайым»
Рәми Ғарипов исемендәге
1-се БРГИ директоры
«29» август 2023 йыл
-------------И.Р.Сәлихов
Приказ № 463
от 31.08.20232

**«Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү» исемле**
**дәрестән тыш эшмәкәрлектең программаһы**

| | |
|---|---|
| Йүнәлеше | Дөйөм интеллектуаль |
| Исеме | Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү |
| Класс | 11 |
| Тормошҡа ашырылыу ваҡыты | 2023-2024 |
| Сәғәттәр һаны | Аҙнаға -1 сәғәт, йылға-33 |
| Уҡытыусы | Кайбышева Альбина Хәсән ҡыҙы |

**Аңлатма яҙыу**

Дәрестән тыш эшмәкәрлек
программаһы түбәндәге документтарға нигеҙләнеп төҙөлдө:

- Рәсәй Федерацияһының "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль законына (29 декабрь, 2012 йыл, № 273- ФЗ);
- Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" законына (1 июль, 2013 йыл, №696-з);
- *"Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" Рәсәй Федерацияһы Законына (25 октябрь 1991 йыл, № 1807-1);*
- *"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законына (17.03.2003, № 482-з, 28.12.2009, № 192-з.)* ;
- Төп белем биреү дәүләт стандарттарының федераль компонеты (РФ-ның мәғариф һәм фән министрлығы ,05.03.2004 № 1089 (ред. 23.06.2015);

Уҡытыуҙың төрлө этабында уҡытыусының психологик күҙәтеүҙәр алып барыуы һәм уҡыусыларҙағы үҙгәреште өйрәнеп тороуы һорала; дәрестә ҡулланылған метод һәм алымдар уҡыусыларҙың һәләттәре үҫеүенә ни дәрәжәлә тьәҫир итә, уҡыусы күпме үҙ аллы эшләй ала, дәрестә ҡатнашыу дәрәжәһе нисек, фән менән ҡыҙыҡһыныуы үҫәме, хәтер һәм иғтибарлыҡ дәрәжәһе, ихтыяры, фекерләү дәрәжәһе нисек, унын актив йәки пассив булыуы, анализлай һәм йомғаҡлай белеү һәләте, эш темпы нисек, ни өсөн теге йәки был уҡыусы материалды аңламай йәки биремдәрҙе эшләргә өлгөрмәй һәм башҡа шундай мәсьәләләр менән уҡытыусы ҡыҙыҡһынып тороға тейеш.

Дәрес материалы, ҡулланылған метод һәм алымдар, күнегеүҙәр уҡыусыларҙың йәш һәм белем айырмалыҡтарын, дөйөм үҫеш дәрәжәһен, психологик үҙенсәлектәрен иҫтә тотоп һайлана.

Уҡыусыларға белем һәм тәрбиә биреү процесында уҡытыусының уҡыу эшен әүҙемләштереү, бөтөн уҡыусыларҙың интеллектуаль, ижади көстәрен, һәләттәрен белем алыуға туплауы, уларҙың үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен (психикаһы, ҡыҙыҡһыныуы, ихтыяжы, ынтылышы, һәләте, белем үҙләштереү дәрәжәһе, фекерләү дәрәжәһе, хәтере, ихтыяр көсө, һиҙгерлеге, эмоционаллеге), ыңғай һәм кәмселекле яҡтарҙы, уларҙың белем дәрәжәләрен даими өйрәнеүе талап ителә. Шул ваҡытта ғына ул уҡыусыларға дифференциаль һәм айырым (индивидуаль) яҡын килә һәм кәмселектәрен булдырмау сараларын күрә.

***Эш түбәндәге йүнәлештәр буйынса алып барыла:***

-уҡыусыларҙа милли үҙаң тәрбиәләү;
-гуманитар стилдәге фекерләү һәләтен формалаштырыу;
-шәхестең үҙ-үҙенә ышанғанлыҡ, үҙ-үҙен күрһәтеү, үҙ-үҙен раҫлау, үҙ пландарын тормошҡа ашырыу йүнәлешендә рухи мөмкинселектәрен үҫтереү;
-"һәләтле балаларҙың" фәнни-ғәмәли күнекмәләрен, ижади мөмкинселектәрен үҫтереү;

***Бурыстар һәм маҡсаттар:***

1. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса һәләтле балаларҙы асыҡлау.
2. Үҙ фекерен әсә телендә телдән һәм яҙма рәүештә эҙлекле, йыйнаҡ, теүәл һәм матур итеп бирергә өйрәтеү, уҡыусының фекерләү һәләттәрен үҫтереү.
3. Уҡыусының һүҙлек хазинаһын байытыу.
4. Әҙәбиэттән белем биреү, күнекмәләр булдырыу.
5. Уҡыусыла милли рух, үҙ халҡының сәнғәтенә, тарихына, мәҙәниәтенә ихтирам, ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү.
6. Уҡыусының тыумыштан булған һәләтенә үҫергә ярҙам итеү, мөмкинлектәр тыуҙырыу.
7. Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү өсөн шарттар булдырыу.

***Уҡыусылар өсөн эйә булырға тейешле белем, оҫталыҡ һәм күнекмәләр***

1. Уҡыу-уҡытыу процессында уҡыусыны аңлап һәм әүҙем рәүештә белем алыуға әҙерләү, алған белемдәрен, оҫталыҡтарын, күнекмәләрен нығытыу;
2. Башҡорт теле буйынса системалы фәнни белем биреү, уларҙы ирекле аралашырға өйрәтеү, башҡорт доньяһы тураһында күп яҡлы мәғлүмәт еткереү;
3 . Уҡыусыларҙы тестар менән эшләргә өйрәтеү;

4. Башҡорт әҙәби теленең үҫеш үҙенсәлектәрен теүәл күҙ алдына килтереү, тел үҫеп торһон өсөн, уның көндәлек ҡулланышын тәьмин итеү юлдарын белеү;
6 .Төрлө стилдәрҙе айыра белеү, уларҙы файҙалана белеү;
7 .Әҙәби әҫәрҙең жанрын таныу, әҫәрҙең төп идеяһын аңлау, уны миҫалдар менән раҫлау;
8.Һүҙлектәрҙең төрҙәрен, төҙөлөшөн белеп, уларҙы иркен файҙалана алыу;
10. Уҡыусыларҙың телдәр белеү дәрәжәләрен камиллаштырыу, үҫтереү.

**Календарь-тематик планлаштырыу**

| № | Темалар | Дәрес һаны | Үткәрелеү ваҡыты | Фактик ваҡыт |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Инеш дәрес. | 1 | 02.09-09.09 | |
| 3 | Инша яҙырға өйрәтеү. Инша төрҙәре. “Республикама дан йырлайым” иншалар конкурсында ҡатнашыу | 4 | 11.09-16.09<br>18.09-23.09<br>25.09-30.09<br>02.10-07.10 | |
| 4 | Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса мәктәп олимпиадаһына әҙерлек һәм ҡатнашыу | 3 | 09.10-14.10<br>16.10-21.10<br>23.10-27.10 | |
| | Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ҡала олимпиадаһына әҙерлек һәм ҡатнашыу | 2 | 07.11-11.11<br><br>13.11-18.11 | |
| 6 | Төрлө жанрҙарҙы өйрәнеү һәм улар өҫтөндә эшләү.<br><br>Аналитик жанрҙар:<br><br>Корреспонденция- йәмәғәтселек иғтибарын проблемаға йүнәлтә.<br><br>Мәҡәлә һәм уның төрҙәре. Художестволы-публицистик жанрҙар:очерк, фельетон һ.б. | 3 | 20.11-25.11<br>27.11-02.12<br>04.12-09.12 | |
| | Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса регион-ара олимпиадаһына әҙерлек һәм ҡатнашыу | 4 | 11.12-16.12<br><br>18.12-22.12<br><br>25.12-29.12 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | 09.01-13.01 | |
| 7 | Республика һәм район баҫмаларына ебәрерлек эштәр әҙерләү ( “Йәншишмә”, “Аманат” һ.б. ) | 2 | 15.01-20.01<br>22.01-27.01 | |
| 8 | Төрлө ижади конкурстарҙа ҡатнашыу һәм уларға әҙерлек. | 2 | 29.01-03.02<br>05.02-10.02 | |
| | Фәнни-ғәмәли эш. Уның башҡарыу этаптары, төҙөлөшө.<br>Ғилми-тикшеренеү эшен яҡлау тәртибе.<br>Конференция эштәрендә ҡатнашыу(Ғарипов, Вәлиди, Ғафури уҡыуҙары) | 5 | 12.02-17.02<br>19.02-24.02<br>26.02-02.03<br>04.03-09.03<br>11.03-16.03 | |
| 9 | Буктрейлер эшләргә өйрәнеү. | 2 | 01.04-06.04 | |
| 11 | Төрлө темаларға кластерҙар эшләү | 1 | 08.04-13.04 | |
| 12 | 9 май – Еңеү көнөнә бағышланған ижади эштәр өҫтөндә эшләү. | 2 | 15.04-20.04<br>22.04-27.04 | |
| 13 | “Һуңғы ҡыңғырау” байрамына әҙерләнеүҙә ярҙамлашыу. Газетаға материал әҙерләү. Сценарийҙа ҡатнашыуға әҙерлек эштәре үткәреү | 1 | 02.05-11.05 | |
| 14 | “Һуңғы ҡыңғырау” байрамына әҙерләнеүҙә ярҙамлашыу. Газетаға материал әҙерләү. Сценарийҙа ҡатнашыуға әҙерлек эштәре үткәреү | 1 | 13.05-18.05 | |
| | Бөтәһе | 33 дәрес | | |
| | | | | |

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Аҙнағолов Р.Ғ. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2011
2. Иҙелбаев М.Х. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө, 2011

Башҡортса сайттар.

1. Башҡорт матбуғат саралары/BashPrәss/СМИ РБ http://vҡ.çөm/bashmatbugat
2. Халыҡ һүҙе - Башҡортостан мәғлүмәт гәзите http://vҡ.çөm/publiç45700280
3. “Ағиҙел” әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журнал http://agidәl-rb.ru/
4. “Ватандаш” журналы http://www.vataңdash.ru/
5. “Шоңҡар” Башҡортостан йәштәре журналы журналы http://www.шонкар.рф/
6. “Аманат” Республика балалар-үҫмерҙәр журналы http://www.amaңatrb.ru/
7. “ Тамаша” Художественно-публицичтический журнал http://www.tamasharb.ru/
8. “Аҡбуҙат” Башҡортостан Республикаһының балалар журналы http://www.aҡbuҙat-br.ru/
9. “Йәншишмә” гәзите http://үaңshishma.ru/
10. “Киске Өфө” Ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит. http://ҡisҡәuғa.ru/

## Электрон ресурстар

- Башҡорт теленең милли корпусы
- Башҡорт теленең электрон ресурстары
- Сайт изучения башкирского языка
- Машинный фонд башкирского языка
- http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage
- “Курсы башкирского языка”

## Ҡулланылған техник саралар

1. Телевизор
2. Мультимедия проекторы
3. Компьютер

## Корректировка бите

| Класс | Бүлек, тема исеме | План буйынса үткәреү ваҡыты | Корректировка сәбәбе | Фактик үткәреү ваҡыты |
|---|---|---|---|---|

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |